*Рафаэль АМАНТАЕВ,*
*Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы*

# *МӘҢГЕЛЕК ЙӘЙ ИЛДӘРЕНДӘ*

Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле үҙенең 60 йылдан ашыу ижад ғүмерендә бик күп ҡитғаларҙа, бихисап илдәрҙә гастролдә булды. Әммә Үҙәк Америка илдәренә тәүге тапҡыр юл төштө. Иҫ киткес матур хәтирәләр, яҡты тәьҫораттар ҡалдырҙы был сәйәхәт беҙҙең күңелдәрҙә. Әле шуларҙы һеҙҙең менән уртаҡлашырға теләйем.

Ике йыллыҡ тәнәфестән һуң беҙ Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың ярҙамы менән сираттағы гастролгә сыҡтыҡ. Был юлы Европа, Азия илдәренә генә түгел, ә Ер шарының бөтөнләй икенсе өлөшөнә — Үҙәк Америкаға сәйәхәтебеҙ. Артистар өсөн генә түгел, бөтә милли башҡорт сәнғәтен һөйөүселәр өсөн дә мөһим ваҡиға ине ул.

Бынан өс йыл элек Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте беҙгә һыуытҡысы, видеоаппаратураһы, кухняһы булған “Мерседес-Бенц” автобусы бүләк иткәйне. Ошо ваҡыттан алып ул беҙҙең икенсе йортобоҙға әүерелде. Уның менән беҙ бөтә Башҡортостанды, күрше төбәктәрҙе йөрөп сыҡтыҡ, хатта Парижғаса барып еттек. Автобус булған ни, поезда, самолетта йөрөү бөттө. Әммә Үҙәк Америкаға гастролдәр был йәһәттән айырылып торҙо.

Бына автобусыбыҙ Өфөнән Мәскәүгә табан юл алды. Шереметьево-2 аэропортында Мәскәү—Амстердам рейсына билеттар алынған.

Амстердамға тиклем Голландияның KLM авиакомпанияһының “Боинг-737” самолетында остоҡ. “Шипхол” аэропортында туҡталып, Амстердам эргәһендәге “Ибис” ҡунаҡханаһында ҡунғандан һуң иртә менән Амстердам — Сан-Хосе рейсына теркәү үттек. “Мартинэйер” авиакомпанияһының “Боинг-767” самолеты “һә” тигәнсе бейеккә күтәрелде. Был рейс Майамиҙа туҡталыш яһай икән.

Амстердамдан Сан-Хосеға тиклем 11 сәғәт остоҡ. Әммә юлдың оҙонлоғон һис тә һиҙмәнек — самолет эсендәге телевизион мониторҙар беҙҙең әле Ер шарының ҡайһы өлөшө өҫтөнән осоп барғаныбыҙҙы күрһәтеп, төрлө приборҙар самолеттың ниндәй бейеклектә, ниндәй тиҙлек менән һәм тағы нисә сәғәт осасағыбыҙҙы, һауа температураһын күрһәтеп тора.

Тағы шуныһы ҡыуаныслы: Европа һәм Америка илдәренең бөтә авиакомпанияларында ла самолеттарҙа ғына түгел, аэропорттарҙа ла тәмәке тартыу тыйылған.

Бына Майами ҙа артта тороп ҡалды, алда Коста-Рика күренде. Беҙҙе яҡты уттары балҡыған Сан-Хосе ҡаршылай.

Коста-Риканың башҡалаһы Сан-Хосе, дәүләт теле итеп испан теле ҡабул ителгән. Дәүләт башлығы — президент. Аҡса берәмеге — колон. Май-



ҙаны — 30,7 мең квадрат километр. Халҡы — 2,2 миллион. Субэкваториаль климатта урынлашҡан, уртаса һауа температураһы +35 градус тәшкил итә. Үҙәк Американағы ҙур булмаған был илде көнсығыштан Кариб диңгеҙе, көнбайыштан Тымыҡ океан уратып алған.

Коста-Рикаға беҙ 19 мартта, VII Халыҡ-ара фольклор фестивале саҡырыуы буйынса барҙыҡ. Фестиваль 17 марттан 2 апрелгә тиклем Сан-Хосела үтте һәм унда донъялағы 21 ил: Аргентина, Бразилия, Испания, Франция, Италия, Перу, Венесуэла һәм Үҙәк Американағы бөтә илдәр ҙә тиерлек ҡатнашты.

Беҙ барғанда Коста-Рикала йәй уртаһы ине, сөнки Латин Американыңда йәй миҙгеле декабрь уртаһынан башланып, май аҙағынаса дауам итә. Артабан иһә ямғырҙар осоро башлана һәм ул декабргә тиклем һуҙыла. Урмандар һәм баҫыуҙар йыл әйләнәһенә йәшел төҫөн һаҡлай.

Сан-Хосела беҙҙе ҡала уртаһындағы «Президент-отель»ға урынлаштырҙылар. Бүлмә ишектәрендәге биш йондоҙсоҡ ҡунаҡханала хеҙмәтләндереүҙең юғары кимәлдә булыуын күрһәтеп тора. Сит илдәрҙә иртәнге аш хаҡы ғәҙәттә номер өсөн түләү хаҡына инә. Беҙгә иртәнгелеккә төрлө һуттар, емеш-еләк, йәшелсә ашаттылар. Күптәребеҙ папайя, манго һәм авокадо кеүек емештәрҙе тәүге тапҡыр ауыҙ итте. Урындағы халыҡ иһә кокос һуты эсеп һыуһынын ҡандыра. Индеецтарҙың милли ашы булған борсаҡлы дөгө һәм маис йәймәләре менән һыйланылар. Швед өҫтәленә мотлаҡ Коста-Рика кофеһы ҡуйыла. Кофе тигәндәй, унаң еҫе кафелар, барҙар, рестораннар, магазиндарға ғына түгел, ҡала урамдарына һеңгән — ил халҡы кофе эсергә ярата.

Һәр көн иртән беҙҙе балсыҡтан яһалған һыҙғыртҡыс тауышы уятты. Һыҙғыртҡысты әйләндерһәң, бер яғынан маймыл башы, икенсе яғынан носорог, өсөнсө яғынан тутыйғош һ.б. күренә. Бына шулай оҫтаҡул иртүк үҙе эшләгән нәмәләргә реклама яһай, туристарға һатып алырға тәҡдим итә.

Тәүге концерт алдынан беҙҙең бер буш көнөбөҙ бар ине. Рәсәйҙең Коста-Рикалағы илселеге беҙгә ошонан файҙаланып, Тымыҡ океан яры буйындағы һоҡланғыс пляждарҙы ҡарау мөмкинлеген булдырҙы.

Океанға еткәнсе ике сәғәтлек юл тауҙар араһынан бормаланып үтә, әле диңгеҙ кимәленән 2000 метр бейеклеккә күтәрелә, әле Кордильер тауы биттәренә үк төшә. Ике көн буйы самолетта осҡандан һуң арылған, бер бәләкәй йылға (хас беҙҙең Дим кеүек) буйына килеп төшкәс тә Башҡортостандың халыҡ артисы Рәфис Хәйруллин һыу инеп алырға тәҡдим итте. Ни тиһәң дә 35 градус эҫе бит.

Илселектең шоферы Алексей күперҙе үткәс автобусты туҡтатты һәм: “Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә бер нимә күрһәтәм”, — тип серле йылмайҙы.

Күпер аҫтына баҡһаҡ, бер көтөү крокодилдар ята. Йылға буйында ҡояшҡа йылынып ятҡан егермегә яҡын аллигаторҙы (береһе бигерәк ҙур — оҙонлоғо дүрт метр тирәһе булыр) күргәс, һыу инеү ҡайғыһы бөттө. Кемдер берәү: “Яҡыныраҡ барып, фотоға төшөргә ярраймы?” — тип һорай ҡуйҙы. “Бер немец туристы фотоға төшөп ҡарағайны...” — тине Алексей. “Шунан нисек?” — тип



ҡыҙыҡһындыҡ беҙ. “Шул, крокодилдар тотоп ашаны”.

Артабан беҙ Тымыҡ океан яры буйына, эмиграцияға киткән аҡ гвардия офицерының улы хужа булған клубҡа барырға тейеш инек. Американағы бөтә шәхси биләмәләр кеүек, был клуб та түләүле ине, бында бай кешеләр генә ял итә ала. Шулай ҙа беҙҙең илселектең клуб хужаһы менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуы арҡаһында артистарҙы йылмайып үткәреп ебәрҙеләр, әммә һәр кешенән 20 доллар түләтергә онотманылар.

Пляжға тиклем юл ҡырағай джунгли урманы аша үтә. Унда көндөҙ ҙә йөрөүе ҡурҡыныс. Ағас баштарында нимәләрҙер, ҡоштармы-йәнлектәрме, ҡысҡыра, һыҙғыра, һайрай, үлән араһында туҡтауһыҙ әллә нимәләр шыуыша, шығырҙай. Алдыбыҙҙа икһеҙсикһеҙ зәңгәр океан киңлектәре асылғас ҡына кәйефебеҙ күтәрелә төштө. Тирә-йүндәге бөтә матурлыҡ яҡшыраҡ күренһен өсөн беҙҙе тау башына, баҫып ҡарай торған урынға алып менделәр. Тирә-яҡтағы тау битендә береһенән-береһе матурыраҡ, ҡупшыраҡ ҡунаҡханалар теҙелгән. Яр буйлап кокос пальмалары үҫә. Йорттарҙың береһенән икенсеһенә, океан ярына тар ғына асфальт юлдар һуҙылған. Ярҙағы ҡомдо пальмаларҙың күләгәһе ышыҡлап тора, эҫелектән арығандар тиҙерәк шунда ашыға. Океан киңлектәрен урындағы балыҡсыларҙың кәмәләре иңләй. Улар араһында клубта ял итеүсе ҡунаҡтарҙың ҡиммәтле яхталары күренә.

Өфөбөҙҙәге ике метрлыҡ ҡарҙан һуң бына шундай йылы, наҙлы океан ҡосағына эләгеү төш һымаҡ ине. Эргәлә генә ҙур-ҙур балыҡтар йөҙөп йөрөй. Кешеләрҙән һис тә ҡурҡмайҙар. Маска кейгән егеттәр ҡыуып тоторға маташып ҡарағайнылар, эргәлә генә йөрөгән муренаны күргәс, һунар хаҡында тиҙ оноттолар. Һыу инеп, пальмалар күләгәһендә ял итеп алғас, хәл кереп китте. (Беҙҙе килгәс үк, ҡояшта 15 минуттан артыҡ ҡыҙынырға ярамай, тип иҫкәрткәйнеләр). Шул ваҡыт тау башына ҡараһаҡ, оҙонлоғо метрға яҡын булған игуананы күреп ҡалдыҡ. Был хайуандар кешеләргә шул тиклем өйрәнгән, фотоға төшөргә тип яндарына килгәндә лә иғтибар итмәйҙәр. Марсель ҡойроғонан тотмаҡсы булғас ҡына урынынан күсеп ятты. Шул ваҡыт ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелде. Ҡараһаҡ, Азат Хәмзин океанда һыу ингән сағында ташбаҡа тотоп алған. Диаметры 80 сантиметр тирәһе булыр. Урындағы халыҡ әйткәнсә, ундай ҙур ташбаҡалар һирәк осрай икән. Ташбаҡа менән туйғансы фотоға төшкәндән һуң уны кире океанға ебәрҙек. Китер алдынан осло моронло, оҙон йомшаҡ ҡойроҡло маймылдарҙы күреп ҡалдыҡ. Уларҙың, аҙыҡ эҙләп, иғтибарһыҙ ял итеүселәрҙең пакеттарын йыртыуы хаҡында беҙҙе иҫкәрткәйнеләр инде.

Бына шулай ҡояшта ҡыҙынып, һыу инеп, ял итеп, иҫтәлеккә фотоға төшөп, ҡунаҡханаға әйләнеп ҡайттыҡ. Иртәгәһенә беҙ Сан-Хосе халҡын үҙ сәнғәтебеҙ менән әсир итергә тейеш инек.

Тәүге концерт Сан-Хоселағы Мелино Салазар үҙәк милли театрында үтте. Театр ишеге алдында беҙҙе турғайҙар кеүек ҡала буйлап осоп йөрөүсе тутыйғоштар көтөүе ҡаршы алды. Ҡыйыҡ ситенә ултырғандар ҙа, эй сырылдайҙар, әйтерһең дә беҙҙең килеүебеҙгә шатланалар.

Ни тиһәң дә, сит илдәрҙә тамашаларҙы юғары кимәлдә үткәрә беләләр: яҡтылыҡ та етерлек, музыка ла яҡшы ишетелә. Артистар, бейеүселәр өсөн сәхнәлә бөтә шарттар ҙа бар. Әлбиттә, беҙҙең өсөн иң элек иҙәндең һәйбәт булыуы кәрәк. Уның шәплеген иртәнге репетицияла уҡ тойҙоҡ. Бөтәбеҙҙе лә бер һорау борсой ине: тамашасылар булырмы? Нисек ҡабул итерҙәр? Сөнки беҙҙең концерттарға билет хаҡы 2,5 долларҙан 6 долларға тиклем ине.

Бына кис тә етте. Партерҙа бик тә нәзәкәтле тамашасылар ултыра. Балконға йәштәр тулған. Хөкүмәт ложаһында — Рәсәй илсеһе, Коста-Риканың хөкүмәт делегацияһы. Концертты алып барыусы тамашасыларға беҙҙең ил, Башҡортостан Республикаһы хаҡында һөйләй, беҙҙең ансамблдең тарихы менән таныштыра. Тамашасыларҙың һис тә иҫтәре китмәгән кеүек, беҙҙең мәҙәниәткә индеецтарҙыҡына ҡараған төҫлө мөнәсәбәт.

“Төньяҡ амурҙары”, “Ете ҡыҙ”, “Еҙ үксә” бейеүҙәрен артыҡ иҫтәре китмәйсә генә ҡабул иттеләр. Хәҙер “Салғысылар” бейеүе буласаҡ. Ансамблдең репетиторы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Рим Әбделмәнов беҙҙе йыйып алды: “Егеттәр, тамашасыларҙы йәнләндерергә, ҡыҙҙырырға ваҡыт!” Кәрәк икән кәрәк. Башҡорт Америкала ла башҡорт инде ул. Күңелдә — ижад

ҡомары, ҡанда дәрт ҡайнай. Артистар быңдай мәлде "икенсе тын алыш" тип йөрөтә. "Алла беҙҙең менән, беҙҙең артта — Башҡортостан!" тип сәхнә түренә юл алдыҡ. Бына бейеүҙең аҙағы яҡынлаша, һуңғы тапҡыр сыбыртҡы шартлай. Зал алҡыштарға күмелә. Бейеүҙе ҡабатлауҙы һорайҙар! Булды, тимәк, тамашасы беҙҙеке! "Рус бейеүе", "Белорус бейеүе", "Гопак"ты ла ҡабат-ҡабат бейетәләр. Оркестр уйнап туҡтауға тамашасылар тороп алҡышлай. Беҙҙең сәнғәтте, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың сәнғәтен шулай ихлас тәбрикләй улар. Беҙ, артистар, сәхнәлә торабыҙ, аяҡтар ҡалтырап тора, арҡа буйлап тир аға, тамаҡҡа төйөр тығылған кеүек, ә күңелдәрҙә — ҡыуаныс, күҙҙәрҙә — шатлыҡ йәштәре.

"Фәйзи Әҙһәм улы, һеҙгә оло рәхмәт. Талантығыҙ шундай бөйөк, уны йылдар ҙа, юлдар ҙа, ил сиктәре, кешенең йәше лә, милләте лә инҡар итә алмай! Һеҙҙең бейеү телегеҙ ябай ҙа, бөйөк тә, уны һәр ерҙә, һәр кем аңлай, Ер шарының бөтә төбәктәрендә лә үҙ итәләр уны!!!"

Коронадо, Моравия һәм Кариариҙа асыҡ майҙансыҡтарҙа уҙған өс концерт та ҙур уңыш ҡаҙанды. Концерттан һуң автограф алырға йәки үҙенең һоҡланыуын белдерергә теләгән тамашасыларҙың сәхнәнән алып автобусҡа тиклем теҙелеп торғаны әле лә хәтерҙә.

Шулай бер ваҡыт Сан-Хосе эргәһендәге Моравия ҡалаһында концерт буласаҡ майҙанға килдек. Тамаша башланырға бер аҙ ваҡыт бар. Беҙҙән алда сәхнәлә урындағы популяр роктөркөм сығыш яһай ине. Грим бүлмәләре буш булмағас, сәхнә артындағы үләнгә ултырыштыҡ. Ул арала беҙҙең эргәгә фотоға төшөүебеҙҙе һәм автограф биреүебеҙҙе һорап бер-нисә егет һәм ҡыҙ килеп баҫты. Беҙ аптырап ҡалдыҡ: концерт өс сәғәттән һуң ғына башлана бит. Һөйләшә башлағас, шуны белдек — улар беҙҙең Коронадолағы концертта булғандар икән, ә бөгөн дуҫтарын алып тағы бер тапҡыр ҡарарға килгәндәр. Беҙҙең иртәгә ҡайҙа сығыш яһаясағыбыҙҙы белгәс, унда ла барырға, дуҫтарын алып килергә вәғәҙә иттеләр.

Рәсәй илселегендә ҡабул итеү ваҡытында ансамблдең сығыш яһауы үҙе бер ҙур сәйәси сараға әүерелде. Беҙҙең килеүгә арналған был ҡабул итеүгә Испания, Аргентина, АҠШ, Канада һәм Израиль илдәре илселәре саҡырылғайны.

Сан-Хосены төнгө ҡараңғылыҡ солғай. Эргәләге бассейнда ай нурҙары сағыла, бассейндың тирә-яғындағы өҫтәлдәрҙә гәлсәр стакандар емем итә. Ошо сихри мәлдә төн ҡараңғылығынан ете ҡыҙ — ете һылыу күренә. Музыка тына, тылсымлы күренеш юғала, ә уның урынына дәрт-дарманы ташып торған дүрт ҡыйыу башҡорт егете сыға. Оркестр "Мәскәү яны кистәре" көйөн башҡара. Ә "Катюша" көйөн ишетеү менән төрлө яҡтан, төрлө акцент менән русса "Браво! Рәхмәт!" тип ҡысҡыралар. Беҙҙең сығышты "Гөлнәзирә" бейеүе тамамлай. Балетмейстерҙың табышы — Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Филүс Ҡаҙаҡбаев бейеүҙең аҙағында ҡулына милли флагыбыҙҙы тотоп йүгереп үткәндә бөтә зал аяғүрә баҫып алҡышлай. Банкетта сығыш яһағандан һуң беҙҙең илсе һәм уның ҡатыны һәр беребеҙгә айырым рәхмәт белдерҙеләр, ҡунаҡтарҙың бейеүселәрҙең оҫталығына һоҡланыуын әйттеләр, сөнки 10 бейеүҙе беҙ бассейн алдындағы ике метрлыҡ майҙанда бейенек.

Концерттан һуң беҙҙе һунарсылар йортона саҡырып һыйланылар, уңыштар менән ихлас ҡотланылар.

Шул ваҡыт мин "Сәғәт нисә?" тип һорай ҡуйҙым. "Киске сәғәт туғыҙ", — тинеләр. Туғыҙ. Шуға Сан-Хосе менән Өфө араһындағы 12 сәғәт ваҡыт айырмаһын ҡушһаң, Өфөлә 25 март, иртәнге 9 була. Бөгөн атайымдың тыуған көнө, юбилейы — уға 70 йәш! Ауыр ҙа, абруйлы ла ғүмер юлы үткән ул. Шуны иҫкә алып, "Ата-әсәләр өсөн! Беҙҙе гастролдәрҙән һәр ваҡыт көтөп торған, уңыштарыбыҙға ҡыуанған, беҙҙең менән ғорурланған кешеләр өсөн!" тип тост тәҡдим итәм.

Уйҙарым тыуған яҡҡа, Өфөгә алып ҡайта. Унда ҡунаҡтар көтөп, өҫтәл әҙерләгәндәрҙер. Атайым гәҙәттәгесә былау бешерәлер. Лия — үҙенең тәмле бәлешен, Лида иһә теленде йоторлоҡ торт әҙерләгәндер. Искәндәр әле күптән түгел генә һатып алған аудиоаппаратураһы менән булышалыр, ҡунаҡтар өсөн көйҙәр һайлайҙыр.

Ер шарының икенсе яртыһынан, океан аша, атайымды юбилейы менән ҡотлайым, уға һаулыҡ, бөтмәҫ дәрт, туғандарының, балаларының ихтирамын татып йәшәүен теләйем.

Коллегаларыма күҙ һалам. Һиҙеп торам, улар ҙа тыуған йорттарын иҫкә төшөрә. Беҙ, артистар, ғәҙәттә гастролдәргә туғандарыбыҙҙың, яҡындарыбыҙҙың фотоһүрәттәрен алып йөрөйбөҙ. Ҡунаҡханала берәйһенең бүлмәһенә керһәң, бәләкәй өҫтәл өҫтөндә ата-әсәләренең, балаларының фотоһүрәте тора. Грим бүлмәһенә күҙ һалһаң, сумаҙан ҡапҡастарына ла фотоһүрәттәр йәбештерелгән була, хатта аҡса муҡсаһында ла фотолар ята. Бына шулай үҙебеҙҙе өйҙә көтөп торған ҡәҙерле кешеләребеҙ беҙҙең менән ҡитғалар буйлап бергә йөрөй.

Коста-Рикала гастролдәр тамамланды. Алда беҙҙе Никарагуа иле көтә. Никарагуаның башҡалаһы — Манагуа, рәсми тел — испан теле. Дәүләт башлығы — президент. Аҡса берәмеге — кордоба. Майҙаны — 130 мең километр булып, 2,7 миллион халыҡ йәшәй. Тропик климатлы ил, уртаса температура +38 градус.

Никарагуа сиген беҙ иртәнге сәғәт 6-ла үттек. Иге-сиге күренмәгән Никарагуа күле артында тынып ҡалған вулкандар йоҡоға талған. Аяуһыҙ ҡазалар — вулкандар һәм ер тетрәүҙәр Никарагуала йыш булып тора икән. Манагуаны тулыһынса емергән 1973 йылғы ер тетрәү ваҡытында башҡаланың 21 мең кешеһе һәләк булған. Ошо һәләкәттән һуң ил әле һаман аяҡҡа баҫа алмай. Ер тетрәүҙән һуң Манагуала ике генә бина — Президент һарайы менән Милли театр ғына емерелмәй тороп ҡала. Беҙ тап ошо театрҙа ике тапҡыр сығыш яһарға тейешбеҙ. Башҡа бер ҡатлы йорттар янында театр бинаһы сүллектәге Египет пирамидаһылай һерәйеп тора ине.

Манагуала беҙҙе “Мерседес” тигән шәхси ҡунаҡханаға урынлаштырҙылар. Ер тетрәү хәүефлеге янағанлыҡтан, Никарагуала йорттарҙы бер ҡатлы итеп кенә төҙөйҙәр, шуға күрә был ҡунаҡхана йорттары ике гектар майҙанға һуҙылғайны. Беҙ бәләкәй ауылдағы кеүек, һәр ҡайһыбыҙ үҙ йортонда йәшәгәндәй урынлаштыҡ: ашарға килгәндә генә осрашабыҙ, буш ваҡытты күберәк урта тирәлә эшләгән бассейн эргәһендә уҙғарабыҙ.

Ҡунаҡхананың тирә-яғына берсе... берәһенән-береһе матур ағастар, ҡыуаҡтар ултыртылған. Бейек кокос пальмаларын лимон менән манго ағастары уратып алған. Юл буйҙарында банан үҫемлегенең япраҡтары йәйелеп киткән. Был ожмах мөйөшө хаҡында һөйләгәндә ошондағы ағаста йәшәгән ике тутыйғошты ла онотorға ярамай: йәм өҫтөнә йәм өҫтәп, осоп йөрөйҙәр, ашатырға теләһәң, ҡулыңа уҡ килеп ҡуналар.

Сит илдәрҙән килгән башҡа туристар кеүек, беҙҙе ҡаланың иң тамашалы урыны булған баҙарға алып барҙылар. Никарагуа һөнәрселәре балсыҡтан төрлө нәмә эшләүгә оҫта икән. Кәштәләрҙә, өҫтәлдәрҙә милли биҙәктәр төшөрөлгән ҡурсаҡтар, һауытһаба теҙелгән. Әммә крокодил, игуана, йыландар һәм ташбаҡаларҙың һындары айырыуса иҫтә ҡалды. Бына өҫтәл артында өс бәләкәй генә крокодил һыра эсеп ултыра. Бер крокодил ауыҙына тәмәке мөштөгө ҡапҡан. Ә берәүһе тәпәйҙәре менән “Рәхим итегеҙ!” тип яҙылған милли сүлмәк тотҡан. Анаконда менән үлемесле алышҡан крокодил һыны бигерәк тә иҫ китерлек ине.

Билеттар 10 долларҙан 30 долларға тиклем торһа ла Манагуалағы Милли театрҙың 7500 кешелек концерт залы шығрым тулы ине. Ике тапҡыр сығыш яһағандан һуң Рәсәйҙең Никарагуалағы илсеһе (ул бер үк ваҡытта Гватемала менән Гондураста ла илсе булып тора) беҙҙең сәнғәт менән һоҡланыуын һәм ике ил араһындағы дуҫлыҡ бәйләнештәрен нығытыуға ҙур өлөш индергәнебеҙ өсөн рәхмәт белдерҙе. Ул беҙгә гастролдәрҙе Гватемалала дауам итергә тәҡдим иткәс, тағы бер ғәжәпләндек. Ләкин Гватемалаға тиклем әле үҙенең боронғо архитектураһы менән танылған Лион ҡалаһында сығыш яһайһы бар ине.

Лионға барып етеүе һис тә ҡыйын булманы. Театрҙа костюмдарҙы, реквизиттарҙы ҡалдырҙыҡ та ҡала буйлап сәйәхәткә йүнәлдек. Артабан Тымыҡ океандың Никарагуалағы яр буйына юл тоттоҡ.

Океанда дауыл башланырға тора ине. Үҙҙәренең барса көс-ҡеүәтен күрһәтергә теләгәндәй, океан тулҡындары юғарыға күтәрелә. Әммә башҡорт өсөн, бейеүсе өсөн ике метрлыҡ тулҡын туҡынмы ни ул?! Туйғансы һыу инеп, иҫтәлеккә төрлө ҡабырсаҡтар йыйып алып, концертҡа әҙерләнергә киттек. Был сығышыбыҙ ҙа уңышлы үтте.

Шулай итеп Никарагуа ла артта ҡалды, алда беҙҙе Гватемала көтә. Майа индеецтары йәшәгән тарихи төбәккә бер сәғәт осаһы икән.

Бына Гватемала. Башҡалаһы ла Гватемала икән. Дәүләт теле — испан теле. Дәүләтте президент етәкләй. Аҡса берәмеге — кетсаль. Майҙаны — 108,9 мең квадрат километр, халҡы — 6,6 миллион. Субэкваториаль климатлы ил, уртаса температура +30 градус тәшкил итә.

Гватемаланы 300 вулканлы ил тип йөрөтәләр. Был илдең боронғо мәҙәниәте яҡшы һаҡланған. Гватемаланың милли театры Үҙәк Америкала иң ҙур иҫәпләнә һәм унда 2200 кеше һыя. Беҙҙең тәүге сығышыбыҙ ошонда үтергә тейеш ине.

Беҙҙе Гватемала аэропортында ҡаршылаған илселек вәкиле Александр алдан иҫкәртеп ҡуйҙы: "Ҡараңғы төшкәс, берегеҙ ҙә ҡунаҡхананан сыҡмағыҙ. Көндөҙ ҡала буйлап 5-6 кеше бергә йөрөгөҙ һәм ҡиммәтле биҙәнеү әйберҙәрен алмағыҙ!" Баҡһаң, Гватемалала кешеләрҙе, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм балаларҙы урлайҙар һәм башҡа илдәргә һаталар икән. Был хәбәр беҙҙе шаҡ ҡатырҙы, ләкин һәр илдең үҙенең үҫеш закондары бар, бының менән килешмәйсә булмай.

Ысынлап та, икенсе көндө дүртәрләп-бишәрләп ҡалаға сыҡһаҡ, бернисә ирҙе күрҙек. Билдәге ҡайыштарына пистолет йә мачете (шәкәр ҡамышын ҡырҡа торған ҙур бысаҡ) тағып алып, иркенләп йөрөйҙәр. Ул ғына ла түгел, бер аҙ киткәйнек, үҙ халҡы өсөн күберәк хоҡуҡ талап иткән индеецтар ҡәбиләһенә тап булдыҡ. Йөк машинаһына ултырған етәкселәре төрлө талаптар ҡуйылған лозунгылар ҡысҡыра. Машина артынан милли кейемдәге ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар атлай. Улар ҙа төрлө лозунгыларҙы ҡабатлай, атлап барған ыңғайы балаларын ашатып алалар, үҙҙәрен дә онотмайҙар. Демонстрация ваҡытында полиция транспорт хәрәкәтен туҡтатып тора. Магазиндар ябыла. Үҙәк Америкала бындай демонстрациялар — милли һыҙат, тип аңлаттылар беҙгә һуңынан. Шундай уҡ демонстрацияны беҙ Сан-Хосела ла күргәйнек, улар ҡала телефон селтәрен коммерциялаштырыуҙы бөтөрөүҙе талап итә ине. Демонстранттар үтеп бөтөүгә магазиндар асылды, ҡала үҙенең ҡәҙимге тормош ағымын алды.

Артистар һәр театрҙы иң элек сәхнә итеп күҙ алдына килтерә, зал, фойе улар өсөн икенсе сираттағы нәмә. Гватемалалағы Милли театрҙың ҡырҡ метрлыҡ сәхнәһен күргәс, йөрәк әллә нишләп китте, сөнки артистар концерт барышында бейеү менән бергә төрлө костюмдар ҙа кейергә тейеш. Сәхнә киң булһа, грим бүмәһенә барып кейенеү-яһаныу һәм сәхнәгә кире килеү өсөн ваҡыт күберәк китә. Ни тиһәң дә, сәхнәләге бейеү тамамланғансы киләһе концерт номеры өсөн кейенеп өлгөрөргә кәрәк. Шуға күрә был концертта беҙ арманһыҙ булып арыныҡ.

Концерт һуңлап башланды, сөнки хөкүмәт делегацияһын көтәләр ине. Беҙҙең сығыштар Гватемала менән Рәсәй араһында дипломатик мөнәсәбәттәрҙе тергеҙеүҙең 55 йыллығына арналғайны. Концертҡа илдең оборона һәм мәҙәниәт министрҙары, президенттың бер туған һеңлеһе килде.

Бына залда ут һүнә. Тамашаны алып барыусы тыуған илебеҙҙең тарихы, бөгөнгөһө менән таныштыра.

Концерт тамамланғас, башҡорт бейеүселәренең сәнғәтенә ғашиҡ булған тамашасылар "Вива, Россия!" — тип ҡысҡыра.

Икенсе көндө беҙҙе Гватемаланың боронғо башҡалаһы — вулкандар араһында, тарлауыҡта урынлашҡан Антигуа ҡалаһына алып киттеләр. Юл тауҙар аша майя ҡәбиләһе индеецтары йәшәгән изге ер буйлап үтә. Башҡортостаныбыҙҙың гүзәл тәбиғәтенә мөкиббән ғашиҡ кеше булараҡ, тропик илдәр тәбиғәтенең матурлығын республикабыҙҙың Бөрйән районы менән генә сағыштырырға мөмкин, әммә шуны иҫәпкә алыу мөһим: бында тауҙар ун тапҡырға күберәк, тарлауыҡтар ҙа ун тапҡырға тәрәнерәк. Ул күренеш әле һаман күҙ алдында: уң яҡта — күккә олғашып торған ҡая, ә һулда — төпһөҙ тарлауыҡ. Офоҡта иңдәренә аҡ болоттар ҡунған дүрт вулкан һынлана. Ошо мәлдә күкрәкте киреп тын алаһы ла, ҡанаттарҙы йәйеп, был матурлыҡ өҫтөнән иңләп осаһы килә.

Урындағы халыҡ тау битләүҙәрендә кофе үҫтерә, йәшелсә түтәлдәре лә күренә. Йәшелсә һәм емештәрҙән йылына биш тапҡыр уңыш алырға мөмкин, тинеләр. Әммә бындағы халыҡ ялҡауыраҡ икән, уңыш артынан ҡыумайҙар. Рәфискә етә ҡалды: "Эх, Рафаэль менән Фәниәне бында килтерәһе ине. Улар ысын баҡсасының ниндәй икәнен күрһәтерҙәр ине!"

Ысынлап та, эҫе булғанлыҡтан халыҡ ашығып бармай, яратҡан һүҙҙәре

“маньяна”, йәғни “иртәгә”. “Нимәгә ашығырға. Бөгөн сәсеп өлгөрмәһәң, иртәгә сәсермен әле”, тиҙәр. Сөнки бында көҙ ҙә, ҡыш та юҡ — йыл әйләнәһенә йәй. Беҙҙең крәҫтиәнде ошо климатҡа килтерергә ине. Улар бер йәй эсендә бөтә ғаиләһенә, туғандарына етерлек уңыш үҫтерә, ҡышҡа әллә күпме варенье ҡайнатып, йәшелсә тоҙлап ҡуя. Ә бында йылына биш тапҡыр уңыш алырға мөмкин.

Антигуа ҡалаһы өҫтөндә “Һыуҙар” тигән вулкан ҡалҡып тора. Уны вулкан соҡоронда барлыҡҡа килгән күл хөрмәтенә шулай атағандар. Был күл диңгеҙ кимәленән 3000 метр бейеклектә урынлашҡан. Автобус беҙҙе ҡаланың уртаһына илтеп төшөргәнлектән, баш ҡала менән танышыу ошонан башланды. Үҙәк майҙанға сығып та өлгөрмәнек, беҙҙе бала-саға уратып алды — үҙҙәре эшләгән әйберҙәрҙе: милли кейемдәге ҡурсаҡтар, төрлө биҙәнеү әйберҙәрен, сувенирҙар һатып алырға тәҡдим итәләр. Майҙанда оҫталар үҙҙәре лә бар: шунда уҡ милли биҙәктәр менән туҡыма һуғалар, ҡамыштан тәрилкәләр һәм көршәктәр үрәләр, мәрйендән төрлө милли биҙәнеү әйберҙәре эшләйҙәр.

Гватемаланың боронғо башҡалаһындағы сығышыбыҙ ер тетрәүҙәрҙән һәм вулкандар урғылыуҙан һуң ниндәйҙер мөғжизә менән һаҡланып ҡалған, XVII быуатта төҙөлгән монастырь алдындағы асыҡ майҙанда үтте. Бында һәр 70 йыл һайын вулкандар урғылып тора икән. Концертыбыҙ уңышлы үтте, күрәһең, бөтә изге йолаларын һаҡлап, тәбиғәт көсөнә ышанып һәм аллаға табынып йәшәгән индеецтарҙың изге ере беҙгә дәрт өҫтәгәндер.

Үҙәк Америка буйлап гастролдәге һуңғы сығышыбыҙ индеецтар мәҙәниәте бишеге булған Кесальтенанго ҡалаһында үтте. Ҡала Үҙәк Американың ошо өлөшөндә генә йәшәгән кетцаль тигән изге ҡош хөрмәтенә аталған. Гватемаланың аҡса берәмеге лә кетсаль икән. Был ҡош “Ҡыҙыл китап”ҡа индерелгән, бик һирәк осрай.

Антигуа кеүек, был ҡаланы ла испан конквистадорҙары төҙөгән. Индеецтар стилендә оҫта итеп эшләнгән таш менән берлектәге Европа монументализмы ҡалаға ҡабатланмаҫ матурлыҡ өҫтәй. Ҡала диңгеҙ һәм океандарҙан ситтә, бейек тау араһында урынлашҡан.

Концерттар төрлө була. Әммә гастролдәге һуңғы концерт айырыуса дәртле үтә. Һуңғы сығыш. Ирекһеҙҙән йырлайһы килә, шиғыр юлдары тыуа:

Ай-һай, бейенек,
Американы еңдек!
Башҡорт халҡының сәнғәтен
Бейеклеккә күтәрҙек!

Бына сумаҙандар әҙер, ҡайтырға мөмкин. Сит ил ни тиклем генә матур булмаһын, емештәре ауыҙыңа өҙөлөп төшөрҙәй булһа ла, тыуған ер, үҙеңде кеше иткән, оло юлға сығарған тыуған төйәгең үҙенә тарта.

Алда Башҡортостан көтә. Коста-Рика, Майами, Амстердам аша Мәскәүгә осабыҙ.

Бына шулай беҙ өс аҙна буйы мәңгелек йәй илдәрендә булдыҡ.